Башҡортостан Республикаһы

Ауырғазы районының муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждинеһы

Талбазы ауылы Лицейы

# «Ҡоролтайға әйтер һүҙем бар»

темаһына инша

Башҡарҙы: 7-се класс уҡыусыһы ЯхинаАйгүзәл

Тикшерҙе: башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Ғүмәрова Айһылыу Әхәт ҡыҙы

Талбазы 2015

Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы электән үк тарихыбыҙға ингән һәм тамырҙары борон замандан башланып, әлеге көндәргәсә үҙенең традицияларын, үҙенсәлеген һаҡлап ҡала алған. Ошонда, башҡорт ерендә, башҡорттарҙың йөҙәрләгән быуыны тыуған, нығынған һәм өлкәнәйгән. Ошонда башҡорттар үҙ хоҡуҡтарын яҡлаған һәм һәр ваҡыт ҡаҡшамаҫ азатлыҡ һөйөүсәнлек рухы, ныҡлығы, тыуған ергә мөхәббәте менән айырылған. Башҡорт милләтенең ҡатмарлы тарихының бөгөнгө көнгә тиклем төп йөкмәткеһе уның азатлыҡ өсөн, үҙ халҡын, телен һаҡлап ҡалыу өсөн көрәше менән билдәләнә. Әммә әлеге көндәрҙә милләтебеҙҙең үҫешен тотҡарлаусы проблемалар бар. Шунлыҡтан минең ҡоролтайға еткерергә һүҙҙәрем бар:

1. Милләттең үҫешендә мөһим ролде халыҡтарҙың үҙ туған теле башҡара. Шуның өсөн дә туған телгә айырым ҙур иғтибар кәрәк. Туған телгә һөйөү, үҙ телеңдә һөйләшеүгә нигеҙ ғаиләлә һалына. Шунлыҡтан йәштәр ҡатнаш никахтарҙан баш тартып, үҙ туған башҡорт телен балаларына ла тапшырһын ине. Сөнки бигерәк ҡала мөхитендә йәшәүсе башҡорт ғаиләләренең балалары үҙ туған телен белмәүе ғәжәпләндерә. Беҙ үҙебеҙҙең башҡортлоҡтан оялған кеүек, ҡала урамдарында бер-беребеҙ менән русса аралашабыҙ. Мин рус мәктәбендә уҡыһам да, тиҫтерҙәрем менән үҙ туған телемдә һөйләшәм. Минеңсә, шулай булырға тейеш. Үҙ телеңдә һөйләшеүҙе модаға индерергә кәрәк.
2. Артабан туған телеңдә һөйләшеүгә нигеҙ балалар баҡсаһында һәм мәктәптә һалына. Һәр бер балалар баҡсаһында башҡорт төркөмө асылһа, башҡорт телен уҡытыу алып барылһа – тел үҫешенең проблемаһы менән осрашмаҫ инек, бәлки. Мәктәптәргә килгәндә, башҡорт телен уҡытыу ҡыҫҡартылды. Хатта башҡорт теле төркөмдәре бала һаны етмәү арҡылы ябылалар. Ата-әсәләр үҙ балаларын рус төркөмөнә бирергә мәжбүр булдылар.Ҡала мөхитендә үҫкән балаларҙың күбеһе башҡорт телен аҙнаһына ике сәғәт өйрәнә. Тимәк, ғаиләһендә, урамда башҡортса һөйләшмәгән бала башҡорт телендә айына яҡынса 8-9 сәғәт тирәһе генә аралаша. Ғаиләлә башҡортса һөйләшмәгәс, ата-әсә балаһына телде үҫтереүҙә ярҙам да итә алмай.

Һөҙөмтәлә, ата-әсәйҙәр үҙҙәре үк балаларын бөйөк ҡиммәттән - туған теленән мәхрүм итеүселәр булып тора. Шуныһы тағы ла ҡыҙғаныс: уҡыусыларға «Башҡорт телен өйрәнеү һиңә киләсәктә кәрәкмәй, уның файҙаһы теймәйәсәк» тигән фекер ата-әсәләр, ҡайһы бер уҡытыусылар, хатта етәкселәр тарафынан һеңдерелә. Ләкин, шуға ҡарамаҫтан, балаларҙа башҡорт телен өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу кәмемәһен  һәм мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыуға, үҙ телеңде өйрәнеүгә ҙур иғтибар бүленһен ине.

Йомғаҡлап әйткәндә, беҙ башҡорт теле дәрестәрендә үҙ туған телебеҙҙең милли традицияларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, моңло йырҙарын,  башҡорт халҡының арҙаҡлы шәхестәрен, шағирҙарын, йырсыларын өйрәнәбеҙ һәм киләсәктә үҙ телебеҙгә, рухыбыҙға мәңге тоғро ҡалабыҙ. Иң мөһиме – Тыуған еребеҙ, йәшәр төйәгебеҙ бар. Тыуған ер – халыҡтың терәге. Халыҡ булһа, йәшәһә, уның теле лә йәшәр. Ә беҙ, йәш быуын, Тыуған еребеҙҙең киләсәге, тимәк, киләсәк беҙҙең ҡулда, тигән һүҙ.